*Т. САФИНА*

# ҺӘЙКӘЛДӘР ТЕРЕЛӘР ӨСӨН

Икһеҙ-сикһеҙ киңлек. Урал тауының теҙмәләре итәктәрендә уйһыуҙар. Шул үҙәндәр буйлап көмөш бутал ялатып сыҡҡандай, Яйыҡ аға. Төньяҡта, тау армыттары аша ҡарап, Ирәмәл ята. Әле бынан Бөркөт-оя тауынан әллә ни хәтле донъя күренә. Учалы үҙе лә, Верхнеуральск ҡалаһы ла ус төбөндә ятҡан кеүек, ә Ирәмәлгә артылһаң? Унан ни, бөтә Ер шары күренәлер ул?! Эх, әгәр ошо матурлыҡты буяуҙар менән киндергә төшөрөп булһа... Урал тауын, ана, Урал батырҙың һөйәктәренән яралған, тиҙәр. Ҡасандыр ҡороп бөткән тәбиғәткә тере һыу бөрккән, ер-һыуҙы үлемдән алып ҡалған, тип һөйләй ҡарттар. Халҡы өсөн йәнен фиҙа ҡылған батыр ни рәүешле булған? Скульпторға уҡып булһа, бына ул уны һынландырыр ине! Яйыҡ ярҙарында балсыҡ күп, шул балсыҡта үҙең теләгән фигураны әүәлә лә әүәлә...

Науруҙ урта мәктәбендә уҡыған саҡта уҡ рәсем төшөрөргә яратҡан Хәйҙәр Ғарипов үҙенең киләсәген сәнғәткә бағышларына ышана. Ауылдаштары араһында балта оҫтаһы булып танылған атаһы Халидар ҙа улының уйына ҡаршы килмәй: буяуҙар алып бирә. Профессиональ сәнғәткә юлдың профессиональ мәктәп аша һалынғанын яҡшы төшөнә: әле һигеҙенселә уҡып йөрөгәндә үк Мәскәүҙәге Художество академияһының ситтән тороп уҡыу студияһына уҡырға инә...

Ләкин юлдар һаман ситкә борола. Урта мәктәпте тамамлағас, армия хеҙмәте, ун бала атаһы Халидар ҡарттың донъя ҡуйыуы. Хәйҙәр шулай ҙа сәнғәт даирәһенә яҡыныраҡ йәшәргә була, армиянан һуң Өфөгә килә, төҙөлөшкә эшкә урынлаша. Һәм, ниһайәт, 1969 йылда Өфө сәнғәт училищеһының художество бүлегенә уҡырға инә.

Училищела ул театраль декорация бүлегендә уҡыһа ла, скульптор Ғүмәр Мөхәмәтшин менән нығыраҡ дуҫлаша. Уҡытыусыһында ул сәнғәт серҙәренә өйрәтеүсене генә түгел, рухташ кешене күрә. Шул мәлдәрҙә улар Урал батырҙың һәйкәлен бергәләп эшләү тураһында ла хыялланалар.

Хыял хыял менән, тормош талабы икенсерәк. Училищены тамамлауға ғаиләле, уллы булған Хәйҙәрҙе көнкүреш мәсьәләләре нығыраҡ борсой. Әммә тыуған халҡына хеҙмәт итеү теләге барыбер үҙ көсөндә ҡала. Учалы ҡалаһының крайҙы өйрәнеү музейы менән яҡындан хеҙмәттәшлек итә. Баймаҡ ҡалаһында йәшәгән сағында ла ошо музей өсөн манекен-типаждар яһай башлай. Фатирының кухняһы оҫтахана хеҙмәтен үтәй.

Ғаилә 1977 йылда Учалы ҡалаһына күсә. Хәйҙәр бында музейҙы йыһазлау эшенә ныҡлап тотона. Уның тырышлығы менән музей республикала ғына түгел, Рәсәйҙә бер үҙенсәлекле урынға әүерелә.

Башҡорт халҡының көнкүрешен, кәсепшөғөлөн һөйләп тороусы панорамалар ижад ителә. Аҙаҡ, музей иркен бинаға күсеп сыҡҡас, залдар яңынан эшләнә, әммә Хәйҙәр Ғарипов ҡулы менән тыуҙырылған манекендар әле лә үткәндәрҙең йылдар артында ҡалған күҙе-хәтере булып бағалар.



Хәйҙәр Ғарипов (унда) үҙенең остазы Ғүмәр Мөхәмәтшин менән

Хәйҙәр Ғарипов училищены тамамлап ҡайтҡас, Учалы ҡалаһында егерме йылға яҡын йәшәй. Ошо дәүерҙә ул Төҙөүселәр клубы эргәһендә ойошторолған халыҡ театрының алыштырғыһыҙ рәссамы була. Театрҙың матди базаһын булдыра. Элиста ҡалаһында уҙғарылған Бөтә Рәсәй Халыҡ театрҙары фестивалендә Учалы театры алып барған спектакль художество биҙәлеше өсөн лауреат исемен яулай. Учалы ҡалаһында үткән һәр ҙур байрам Хәйҙәр Ғарипов ҡулдары менән биҙәлә, Яңы йыл майҙанындағы Ҡыш бабай менән Ҡарһылыу ҡарҙан яһалған сәнғәт әҫәре булып һәр яңы йылды ҡаршылай. Шулай ҙа рәссам өсөн Учалыла йәшәгән йылдары — ижади оҫталыҡҡа өлгәшеү дәүере. Көс-хәл менән яулап алған подвал-оҫтаханаһына Хәйҙәр Ғарипов эштән һуң көн дә килә. Ошо подвалда күпме һәйкәлдәр тыуа! Улар тыуған ауылы Наурыҙҙа, Рысайҙа, Ҡотойҙа, Учалы тау-байыҡтырыу комбинатының идара йорто алдында... Юлбашсыларҙың да һынын эшләй Ғарипов. Уларҙың хәҙер дөйөм сәнғәт масштабында әһәмиәте лә юҡтыр, мәгәр скульптор өсөн был эштәр ысын оҫталыҡ мәктәбенә әүерелә. Рәссам үҙен төрлө жанрҙа һынай. Учалы районының юл ситтәренә кейек-хайуандар һынын баҫтыра. Хәҙер, ана, ҡоралай эргәһендә яңы өйләнешкән йәштәр фотоға төшә, сәскәләр һала. Был үҙенсә йәштәрҙең йәшәйеште яңыса тәҫмөрләүенең башлыбыр ҙа, ҡотто даһиҙарҙан түгел, үҙе йәшәгән тәбиғәттән эҙләүелер...

Хәйҙәр Халидар улын үҙе йәшәгән төбәктән сыҡҡан шәхестәр ҙә тулҡынландыра. Ҙур ихласлыҡ менән арҙаҡлы шәхесебеҙ Муса Мортазиндың бюсын башлай. Балсыҡтан һын әҙер була, ләкин форма алыу, унан һуң төп материалдан ҡойоу сығымдар талап итә. Социалистик Хеҙмәт Геройы, йәмәғәтсе Рамаҙан Ниғмәтуллин да төрлө ойошмаларҙан ярҙам һорап ҡарай, әммә балсыҡ кибә, ҡотҡарыусы табылмай. Икенсегә йәнә эшләй был бюсты Ғарипов — уныһын да шул уҡ яҙмыш көтә. Скульптор-рәссамдың «Муса Мортазин эпопеяһы»нан тик музей ҡала: Учалы районы Көсөк ауылындағы Муса Мортазин музейы Хәйҙәр Ғарипов ҡулдары менән йыһазландырылған.

Хәйҙәр Халидар улы Ғарипов хәҙер бына дүрт йыл инде Сибай ҡалаһында йәшәй. Егәрле рәссамдың оҫта ҡулдары бында бигерәк кәрәк булып сыға. Сибайҙа тәүләп асылған Өфө сәнғәт училищеһының филиалына эшкә саҡыралар. Бында ул йәш балаларға һынлы сәнғәт серҙәрен өйрәтә, уҡыу йортоноң художество бүлеген етәкләй. Мәгәр тынғыһыҙ рәссам күңеле һаман ижадҡа тартыла. Күптән түгел Башҡортостан Президенты Мортаза Рәхимов Сибай ҡалаһында ике һәйкәл асыуҙа ҡатнашты. Уларҙың береһе Советтар Союзы Геройы Федор Белов һәйкәле булһа, икенсеһе — башҡорт халҡының ҡаһарман улы һәм төрки халыҡтары тарихына нигеҙ һалыусы Зәки Вәлиди һыны. Уларҙың икеһен дә үҙенең остазы Ғүмәр Мөхәмәтшин менән Хәйҙәр Ғарипов яһаны.

Зәки Вәлиди, шулай итеп, үҙ еренең тупраҡ-балсығынан яһалған һын булып, иленә ҡабаттан һәм мәңгегә ҡайтыуға иреште, мораҙына етте. Күптән түгел Сибай ҡалаһына килеп киткән Сүбәдәй Туған атаһына ҡуйған бюстың ныҡ оҡшағанын тулҡынланыу менән белдерҙе. Әйткәндәй, хәҙер Хәйҙәр Ғарипов остазы менән Зәки Вәлидиҙе унын эҙҙәрен һаҡлаған Темәс ауылында һынландырыу өҫтөндә эшләй.

Һәйкәлдәр үлгәндәр хаҡында һөйләһә лә, тереләр өсөн ҡуйыла. Тереләргә үткәнде хәтерләтер өсөн, үткәндәргә маңлай күҙе аша ғына түгел, хәтер күҙе аша ҡарарға ҡуйыла. Ә хәтер алыҫтарға китә: Ғарипов уларға Вәлиди, Мортазин күҙҙәре аша ла, Урал батыр аша ла ҡарарға тырыша. Дандар рәссам өлөшөнә бик һаран төшһә лә, йәшәгән йылдарының емеше-эше мул. Шул һөйөндөрә. Күптән түгел уға Президент үҙ ҡулы менән «Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре» исеме бирелеү хаҡында Грамота тапшырҙы. Хәйерле юл, сәнғәт уҙаманы!

Һулышың Уралдай иркен, Ирәмәлдәй юғары булһын!



Учалы крайҙы өйрәнеү музейында Х.Ғарипов яһаған манекендарҙан торған, башҡорт халҡының тормошон сағылдырған бер күренеш — «Урал» йыры